# ТАСУИРИ ҺҮРӘТЛӘҮ САРАЛАРЫ.

- **Эпитет** тип ниндәй ҙә булһа күренештең йәки әйберҙең билдәләрен аныҡлаусы һүҙгә әйтәләр: *саф күңел, ғәзиз йән һ.б.*
- Сифаттар менән бутарға ярамай: *йәшел үлән, ҡара күлдәк, асыҡ ишек һ.б.*

# Сағыштырыуҙа ике предмет йәки күренеш сағыштырыла һәм унда икеһе өсөн дә хас булған оҡшаш, дөйөм билдәләр була.

- *Ботағы алтын алҡалай,*
  *Япрағы көмөш тәңкәләй,*
- *Һыны һылыу егеттәй,*
- *Тамыры ташҡа ереккән*
- *Ҡарағай, имән, ҡайыны-*
- *Бары ла һөйгән Уралтау.*
- («Ай Уралым, Уралым»)

- Ниңә баҫып тораһың, ҡараҫҡы һымаҡ, көн кеүек асыҡ, ҡош телендәй генә һ.б.
- - Кеүек, һымаҡ, шикелле, гүйә, әйтерһең дә һүҙҙәре ярҙамында;
- Шулай уҡ *–дай-дәй, -лай-ләй, -тай-тәй, -ҙай-ҙәй* ялғауҙары менән бирелә;
- *-са-сә* ялғауына нигеҙләнгән үрнәктәр ҙә бар.

# Метафорала иһә, образлылыҡ тыуҙырыу өсөн, бер предметтың сифаты икенсеһенә күсерелә.

*Һыуҙарың көмөш.*

*Тупрағың*

*Торғаны алтын һинең.*

(М.Кәрим. «Ҡайын япрағы тураһында»)

- *Һары, йәшел тәңкә койола*
- *Талғын ғына йомшак елдә лә.*
- (К.Кинйәбулатова. «Көҙ еткәс»)

- **Риторик һорау** – формаһы яғынан һорауҙы аңғартҡан, әммә үҙенең мәғәнәһе менән яуапты, раҫлауҙы белдереүсе үҙенсәлекле һөйләм.
- *Тик бер үҙен һөйгән иң буш кеше*
- *Һөйә беләме һуң атлығып?*
- *Кеше өсөн һөйөнмәгән йәндең*
- *Ҙур буламы инде шатлығы?!*
- *(Р.Ғарипов. «Кәңәш»)*

- **Риторик өндәү** – автор кем менәндер һөйләшеүҙе түгел, ә мөрәжәғәт ителгән кеше йәки әйбергә иғтибар йәлеп итеүҙе маҡсат итеп ҡуя.
- *Туғанынан яҙған – ярты йәтим,*
- *Туған теленән яҙған – мең йәтим.*
- *Телде йоҙаҡларлыҡ ғәмһеҙлектән*
- *Уян, халҡым, ҡуҙғал,милләтем!*
- (Р.Бикбаев. «Халҡыма хат»)

# Ғәмәли эштәр.

1.Йырлайым тик сәскәләй
Ҡыҙҙарға бай халҡым өсөн.
(Ш.Бабич. «Халҡым өсөн»)

2. Атаев төркөмөн өҙлөкһөҙ яуған ут ямғыры аша Днепрҙың уң яҡ ярына алып сыҡты.

3. Уттар йәшел йылан булып үрләгән күккә.

4.Әсғәт тә инде ебәк үләнле ғәзиз тупраҡтың үҙ аяғы аҫтында икәнен күптән аңлағайны.

5.Башлана һуң улар ҡайҙан? Улар башы – мәктәп юлы.

6.Башҡортта боронғо олпатлыҡ уянһын,

Ғорурлыҡ, үҙаллыҡ тойғоһо тулаһын! (Ҡ. Аралбай. «Башҡорт королтайына»)